# Башҡортостан - ғәзиз еребеҙ,
# мең йылдарға торор илебеҙ!

(Башҡортостан республикаһы көнөнә арналған тантана сценарийы)

## *Сәхнәләштереү.*

Ҡурай моңо. *Сәхнәгә байрам кейемдәрендә балалар сыға*

***3 уҡыусы ҡурай бейеүе менән башлап ебәрәләр, бейеп бөткәс әңгәмәләшә башлайҙар.***

***<u>Слайд 1 «Башҡорт халҡының барлыҡҡа килеүе»</u>***

**1 уҡыусы**: Ҡайҙа бар икән донъялағы иң матур ер?

**2 уҡыусы**: Ҡайҙа икән донъялағы иң бай ер?

**3 уҡыусы**: Белмәйем – белмәйем… Бик күп ерҙәр үттек, күп һыуҙар кистек,

әммә әлегә ундай ер осраманы.

*Балалар ял итергә ултыралар. Ҡурай моңо яңғырай.*

*Бүре килеп сыға. Ҡурай моңо тына. Балаларға ҡарап тора ла яй ғына атлай башлай.*

**1 уҡыусы**:: Әйҙәгеҙ, уның артынан барайыҡ.

**2 уҡыусы**: Бәлки ул беҙҙе донъяның иң матур еренә алып барыр.

*Зал буйлап үтәләр.* ***<u>Слайд 1</u>*** *эргәһенә килеп баҫалар. Ҡурай моңо.*

**3 уҡыусы**: Күпме тауҙар, һыуҙар күреп,

Илдәр гиҙһәм дә,

Табалманым һәйбәтерәк

Ошо ерҙән дә.

**1 уҡыусы**: Ниндәй матур ер!

**2 уҡыусы**: Ниндәй бай ер!

**3 уҡыусы**: Ул еләге, көмөштәй һыуы, ҡалын урманы.

**уҡыусы**: Әйҙәгеҙ, ошонда төпләнәйек.

**2 уҡыусы**: Үҙебеҙ - башҡорт булайыҡ. Сөнки беҙҙе башҡорт – баш бүре ошо

ергә килтерҙе бит.

*Музыка көсәйә.*

*Балалар сыға*

**Ҡурай моңо аҫтында алып барыусылар сәхнәгә сыға.**

**алып барыусы.**

Тыуған көнөң менән, Республикам,
Татыулығы һәр бер милләттең.

Тыныс йәшәү һинән- минән тора,

Тыныс йәшәү менән ҡиммәтһең.

Хәйерле көн хөрмәтле уҡытыусылар,ҡәҙерле уҡыусылар!

Һеҙҙе ҙур байрам – Республика көнө менән ҡайнар ҡотлайбыҙ!

Беҙ бөгөн гүзәл еребеҙ, гүҙәл телебеҙҙе тағы ла бер тапҡыр данлар өсөн, дуҫлығыбыҙҙы барлар өсөн йыйылғанбыҙ! Оло Ватаныбыҙ шундай киң һәм ҙур. Ул һәр беребеҙҙең күңелендә әллә күпме быуаттарға, барлыҡ кешелек дәүеренә һуҙылған. Илем халҡы менән күркәм һәм бай. Әллә күпме тиңһеҙ шәхестәрҙе, ҡабатланмаҫ аҡыл эйәләрен биргән беҙгә Ер-Әсәбеҙ!

**Һеҙҙең иғтибарға 3 класс уҡыусылары башҡарыуында йыр «Нурлы баласаҡ». Ҡаршы алығыҙ!**

***<u>Слайд - тәбиғәт 2. Слайдта Урал тауы.</u>***

**1Алып барыусы :**

Шул замандан алып башҡорт халҡы башҡорт илендә – Урал тауҙары итәгендә көн күрә башлайҙар.

Уралдың киң далалары, урмандары, саф һыулы йылғалары, ундағы балыҡтары, алтын-көмөшө, ҡиммәтле тиреле йәнлектәре башҡа милләт кешеләрен дә үҙенә тарта.

***Рус халыҡ кейемендә 1 уҡыусы сыға.***

Ай, Урал, ты мой, Урал

Великан седой Урал!

Головой под облака
Поднялся ты, мой Урал!

Моя песня о тебе,

О любви моей к тебе

Вместе с полною луной
Золотом одет Урал,
Вместе с утренней зарей
Серебром блестит Урал.

По бокам твоим, Урал,
Встали темные леса,
А у ног твоих, Урал
Степь – зеленая краса

Ай, Урал, ты мой, Урал
Великан седой Урал
Все слова я растерял,
как воспеть тебя, Урал?

Заиграй же мой курай,
Песню, чтоб вошла в сердца,
И Урал, и весь наш край
Прославляя без конца!

**2 Алып барыусы:**

Тәбиғәт байлыҡтарының бик күп булыуы беҙҙең ата-бабаларыбыҙға ҡыйынлыҡтар тыуҙыра. Сөнки, байлыҡ туплау маҡсатында башҡорт илен ҡулға төшөрөргә, ә башҡорт халҡын ҡол итергә теләүселәр күбәйә.

Шуға күрә лә , теүәл **458** йыл элек башҡорт халҡы үҙ ерен, туған телен, милләтен һаҡлап ҡалыу маҡсатында үҙ ирке менән Рус дәүләтенә ҡушыла.

***<u>Дуҫлыҡ монументы – слайд 3.</u>***

**1- се уҡ.:**

-Атайым әйтә:

- Ватан.

**2-се уҡ.:**

- Әсәйем әйтә:

- Ватан.

**1-се уҡ**:

- Атайымды, әсәйемде

Мин ныҡ-ныҡ яратам.

**2-се уҡ:**

Ҡабатлайым атайымдың, әсәйемдең мин һүҙен:

- Ватан. Ватан. Ватанымды яратам.

**1 Алып барыусы:**

**Ҡаршы алығыҙ һеҙҙең алдығыҙҙа ҡурайсылар ансамбле “---------------“**

**Етәксеһе Эдуард Агишев.**

**1 Алып барыусы:**

Сәхнәгә уҡыусылар 3 төрлө (зәңгәр, аҡ, йәшел) таҫмалар менән сығалар. Хәркәттәр яһайҙар. Сәхнә артынан һүҙәр яңғырай.

**Алып барыусы** :

Башҡортостан флагында
Күк, аҡ, йәшел төҫ уйнай.

Зәңгәр күктә талпына ул,
Аҫыл ҡош ҡанатылай.

Күк төҫ – изгелек билдәһе,
Аҡ төҫ – именлек, сафлыҡ.
Йәшел – йәшәү мәңгелеге,
Татыулыҡ һәм азатлыҡ.

Ҡурай сәскәһенең тажы
Дуҫлыҡты һынландыра.
Гел татыу йәшәгән халыҡ
Ерҙә ныҡ баҫып тора.

Республикамдың флагы
Елберләп саңҡығандай:
“Имен, шат, бәхетле булып
Йәшәгеҙ бер туғандай!”

1990 йылдың 11 октябрендә Республикабыҙ үҙ аллы – суверенлы тип иғлан ителде һәм Башҡортостан Республикаһы тигән исем алды.

***Гимн яңғырай. Аяҡ үрә баҫалар.***

***<u>Слайд - герб һүрәте 4.</u>***

**2 Алып барыусы:**

Тыуған илем, тыуған ерем –

Минең Башҡортостаным.

Тыныс булһын, имен булһын

Көндәрем һәм ал таңым.

Башҡортостан Республикаһының үҙ ***<u>гербы (слайд)</u>*** , үҙ гимны, байрағы ***<u>флагы (слайд) 5</u>*** бар. Республикабыҙҙың тәүге президенты Мортаза Ғөбәйҙулла улы ***<u>Рәхимов (слайд)6</u>*** - Башҡортостан халыҡтарының яҙмышы, киләсәген ҡайғыртҡан хәстәрлекле етәксе, оло шәхес булды. Бөгөнгө көндә республика башлығы Рәстәм Зәки улы ***<u>Хәмитов (слайд)7</u>*** һәм Башҡортостан хөкүмәтенең тырышлығы арҡаһында республика күп уңыштарға өлгәшә. Беҙҙә именлек, милләт- ара татыулыҡ һаҡлана. Башҡорт теле, рус теле менән бер рәттән дәүләт теле тип һанала. Былар бөтәһе лә Башҡортостан суверенитетының изге емеше.

***Башланғыс класс уҡыусылары “Башҡортостан” темаһына шиғырҙарын яттан һөйләп ишеттерәләр”***

1-се уҡыусы:

Малайҙар, ҡыҙҙар һөйләшһен
Илемдә үҙ телендә.
Башҡорт теле – минең телем,
Башҡортостан - минең илем,
Мин бәхетле еремдә.

**2-се уҡыусы**:

Башҡорт теле – минең телем,
Хөрмәтләйем мин һине.
Матурлығың, нескәлегең
Таң ҡалдыра бит мине.

**3-сө уҡыусы**:

Туған телен белмәүсенән
Тыуған ерен һорама.
Тыуған ерен белмәүсенән
Тыуған илен һорама.

**1 Алып барыусы**:

Уҡыусылар, һеҙ туған тел тураһында нindәй әйтем, мәҡәлдәр беләһегеҙ?

Иле юҡтың – көнө юҡ,
Теле юҡтың – йүне юҡ.
Теле барҙың – иле бар,
Иле барҙың – ирке бар.
Әсәм теле – сәсән теле.

**1 Алып барыусы:**

***Ә хәҙер һеҙҙең иғтибарға 4-се класс ҠЫҘҘАРЫ башҡарыуында йыр «_______________» Ҡаршы алығыҙ!***

**Уҡыусы :**

Салауат та туған башҡортан

үҙ телендә ҙурлап данлаған.

Уралына, бөйөк халҡына,

Йән аямай ирек даулаған.

***<u>Слайд – Салауат Юлаевҡа һәйкәл 8.</u>***

Йыр яңғырай Салауат Юлаев тураһында.

**Уҡыусы**: Радионан һәр көн иртән

Сәләмләй беҙҙе Өфө.

Өфө – тыуған баш ҡалабыҙ

Тыуған йортобоҙ төҫлө.

**Уҡыусы** : Беҙ үҙебеҙ – башҡорттар,

Салауат тоҡомонан.

һаҡлайыҡ телебеҙҙе

һөйәйек илебеҙҙе.

**Уҡыусы** : Башҡортостан – тыуған илем,

Ул бит һаҡлай туған телем

**Уҡыусы :** Ул бит һаҡлай яҡты көнөм

Бирә миңә аҡыл, белем.

**Уҡыусы:** Башҡортостан – тыуған ерем

Әсәйемдәй берҙән – берем.

**Уҡыусы** : Башҡортостан – минең Ватан

Яратамын бала саҡтан.

**Уҡыусы** : Ҡурай сәскәһе ете таж,

Нигеҙе - ете ырыу,

Бар милләттәр менән бергә

Бәхетле тормош ҡороу.

**1 Алып барыусы:** Тормош үҙенең тәбиғи закондары менән алға бара. Башҡортостан Республикаһының үҙаллы булыуын, халыҡтарҙың бәхетле, ирекле бай йәшәүен беҙ үҙ аҡылыбыҙ, көсөбөҙ менән генә булдыра алабыҙ. Рухыбыҙ, телебеҙ, һәм милләтебеҙҙе һаҡлар алып ҡалыр өсөн беҙ янмаһаҡ, бүтән бер кем дә янмаҫ. Ер йөҙөндә башҡорттоң бөйөк рухы, көс-ҡеүәте, милләте, ырыуы мәңге йәшәһен!

**Музыкаль номер:**

**Уҡыусылары сығып теҙелә:**

**1-се уҡыусы**:

Ватаным – Рәсәй

Беҙгә атай-әсәй.

**2-се уҡыусы:**

Тыуған ерем – Башҡортостан,

Яратып беҙҙе ҡосаҡлаған.

**3-сө уҡыусы**:

Бәләбәйем - тыуған ерем,

**Бөтәһе бергә:**

Мин бәхетле бала, тиеп,

Ергә оран һалабыҙ.

Ғәзиз тыуған илебеҙгә

Мәңге тоғро ҡалабыҙ.